*Нәркәс* ***ХӨББИТДИНОВА,***
***филология фәндәре докторы***

# Әҙибәнең “күңел йорто” йәки Гөлсирә Ғиззәтуллина прозаһы хаҡында бер кәлимә һүҙ

Гөлсирә Ғиззәтуллинаның ижад майҙанына сығыу мәле илебеҙҙә туҡһанынсы йылдарҙа башланған сәйәси-иҡтисади үҙгәрештәр осоро менән бәйле булды. Әҙәбиәткә ул журналистика аша, тәжрибә туплап, заманса иркен фекер йөрөтөүсән, тормоштоң бөтә ысынбарлығын, пульсын тойған ижадсы булараҡ, әҙерлекле килгәйне. Профессиональ тәжрибә, тормош тәжрибәһе менән бергә үрелеп, яҙыусы күңелендә мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡлы һәм ҡыҙғаныс хәл-ваҡиғаларға ҡоролған сюжеттар яралтты, хикәйәләре нигеҙенә ятты. Шуның өсөн дә Г.Ғиззәтуллина әҫәрҙәрендә тормош ысынбарлығы художестволы дөрөҫлөк менән тығыҙ бәйләнгән, хәл-ваҡиғалары, тәү ҡарамаҡҡа, ябай кеүек күренһә лә, асылда төбөндә тәрән мәғәнә ятыуы, ваҡиғалар үҫешендә геройҙарҙың эске торошонда фәһемле фекер, уй-кисерештәрҙең булыуы күҙәтелә. Г.Ғиззәтуллина — “Өмөтөмдө ҡалдыр” (1993), “Йөҙ ҙә бер ғүмерем” (1997), “Күңел утрауы” (2003) тигән хикәйәләр йыйынтыҡтары, балалар өсөн яҙылған “Юл япрағы менән тамсы” (1994) китабы авторы. Әҫәрҙәрендә әҙибә күптән таныш булған хәл-ваҡиғаларҙы, хис-тойғоларҙы, типиклашҡан образдарҙы яңы күҙлектән, сағыу буяуҙарҙа тасуирлауға ирешә, ирекле, иркен фекер йөрөттө. “Был оригиналь, ирекле, иркен фекер йөрөтөү ҡәҙимге тормошта йәшәүсе геройҙарҙың эш-ҡылығын һүрәтләүҙә лә, рухи донъяларын, эске булмышын, “күңел йортон” асыуҙа ла сағыла”, — тигәйне Г.Н.Гәрәева яҙыусының әҫәрҙәре хаҡында[1].

Г.Ғиззәтуллинаның хикәйәләре уҡыусыны һис тә битараф ҡалдырмай, төрлө уй-тойғолар тыуҙыра. А.Ш.Абдуллина әйтеүенсә, исемдәренән үк әҫәрҙең төп темаһын, проблемаһын күҙалларға мөмкин (“Ҡорбан”, “Ҡәҙерле бала”, “Беренсе мөхәббәт”, “Әбейҙәр сыуағы” һ.б.), уларҙа ҡайһы бер художестволы үҙенсәлектәр асыҡлана, исеме иһә хатта символик мәғәнәгә эйә булып та китә.[2]

Әҫәрҙәрҙәге хәл-ваҡиғалар, күренештәр ҡырҡа үҙгәреүсән. Мәҫәлән, беренсе ҡарамаҡҡа татыу ғына донъя көтөп ятҡан ғаиләлә, бәхетиһәң, бөтәһе лә ал да гөл булмай сыға (“Ә скрипка аңлай”, “Әбейҙәр сыуағы”, “Туғыҙынсы рәттәге урын”, “Беренсе мөхәббәт”, “Һалҡында һүнгән усаҡ” һ.б.), геройҙарҙың ҡәҙимгесә тормошо көтөлмәгәндә ҡапма-ҡаршылыҡлы төҫ алып китә (“Күк умырзая”, “Илаҡ ҡая”, “Ҡәҙерһеҙ”, “Иң зәңгәр диңгеҙ”) һ.б.

[1] *Гәрәева Г.Н.* Заман көҙгөһө: геройҙың рухи донъяһы. — Өфө, 2003. — 109-сы б.
[2] *Абдуллина А.Ш.* Поэтика современной башкирской прозы. — Уфа, 2009. — С.175.

Әҙибәнең әҫәрҙәрендә күбеһенсә ҡатын-ҡыҙ яҙмышы һүрәтләнә. Йыш ҡына был яҙмыш бәхетһеҙ. Геройҙарҙың берәүҙәре бәхетте әллә ҡайҙа ситтән эҙләп интегә, ә бәхете янында ғына булып сыға (“Беренсе мөхәббәт”, “Ҡайт, ҡотом, ҡайт...”, “Әбейҙәр сыуағы”), бәғзеләре тиран, эскесе ир менән йәшәп тә үҙҙәренең бәхетһеҙ булыуҙарын баштарына индереп сығармайынса, шуға күнеп донъя көтә (мәҫәлән, “Күңел йорто” повесы, “Ҡактус сәскә атҡан”, “Көйгән ағас серемәй”, “Ҡәҙерле бала”, “Ҡорбан килтереү” хикәйәләре), кемделер һайлау мөмкинлеге булыуы бәхетһеҙ иткән (“Һөйөүем доғаһы”, “Күк умырзая”). Был хаҡта А.Юлдашбаев “Ирекһеҙ темаға инша” тигән мәҡәләһендә аныҡ итеп яҙҙы (“Ағиҙел”, №8, 2003). Ул да Г.Ғиззәтуллинаның әҫәрҙәренә көтөлмәгәнлектең хас булыуын, кеше кисерештәрен ғәйәт тә оҫта һүрәтләүен билдәләп үткәйне. Мәҫәлән, “Күк умырзая” әҫәрендә бала саҡтан бер-береһен белеп бөткән Айһылыу менән Айбулат, үҫеп еткәс, араларында оялаған мөхәббәттең ҡәҙимге, өйрәнелгән күренешкә әүерелеүен, наҙланыу, иркәләнеү тойғоһоноң да күптән төҫһөҙләнә башлауын аңлайҙар. Айһылыу гәзиттә Сафура исемле ҡатындың мөхәббәт хаҡындағы хатын баҫтыра. Ҡатындың үҙе менән барып танышҡас, ысын мөхәббәттең мәғәнәһенә төшөнә ул. Әҫәр башында апрель айының ҡар ҡатыш ямғыр яуып торған шөкәтһеҙ көнө һүрәтләнә. Ул тулыһынса йәш ҡатындың күңел торошон сағылдырыусы художестволы деталь функцияһын үтәй. Ә инде ауылға барып, Сафура менән төнө буйына һөйләшеп ултырғандан һуң, тормошҡа ул башҡасараҡ баға. Героиняһының күңелендә барған үҙгәрештәрҙе сағылдырыу ниәте менән автор йәнә тәбиғәткә мөрәжәғәт итә: икенсе көндөң иртәһе салт аяҙ була, ҡар ҡалдыҡтарын, сүп-сар түгелгән тау итәгендә күк умырзая сәскәһен күреп хайран ҡала. Сәскә, шөкәтһеҙ булған тирә-яғына иғтибар итмәйенсә, “нәфис таждарын ҡыйыу асып аҡ донъяға баҡҡайны”. Был сәскә асылда Сафураның тормош философияһын иҫкә төшөрә: юҡ, мөхәббәт яңырыуға һәләтле — мәңгелек ул, һөйөү ҡошо ла осмаған — ул һайрай. Быны иҫбатлағандай, болот араһынан ҡояш килеп сыға. Былар Айһылыуҙың үҙе өсөн дә мөһим була. Ул Сафураның “һөйөү ҡошо осоп китә” тигәне үҙенә лә ҡағылыуына инана. Юғиһә, икенсе көндө ошо күк умырзая менән болот араһынан йылмайған ҡояш уға башҡаса тәьҫир итмәҫ ине. Йәш ҡатындың барыһына ла төшөнөп, билдәле бер ҡарашҡа килеүендә шик юҡ.

Эйе, Г.Ғиззәтуллинаның ҡатын-ҡыҙҙары төрлөһө төрлөсә бәхетле һәм бәхетһеҙ. Нисек булмаһын, улар наҙ, күңел йылылығы, аңлайышлы мөнәсәбәт, ихтирам эҙләй, шуларға мохтаж. Шуға ла берәүҙәре был донъянан китергә ҡарар итә (“Партбилет”, “Ҡорбан килтереү”, “Һалҡында һүнгән усаҡ”), бәғзеләре һөйөү һәм һөйөлөү юлын һайлай (“Күк умырзая”, “Ҡәҙерле бала”), уларҙың да һөҙөмтәһе бер иш түгел: бәхетте табып юғалтыусылар ҙа була (“Йәшлектән килгән сәләм”), көрсөккә килеп терәлеүселәр ҙә осрай (“Түлһеҙ”) һ.б. Ғөмүмән, әҙибә геройҙарын төрлө тормош һынауҙарына дусар итә. Төрлө социаль ҡатламдан булһалар ҙа, улар, автор ниәте, маҡсатына ярашлы, әҫәрҙә тормош ҡанундары алдында бер тигеҙ. Был һынауҙарҙа улар тәрән рухи кисерештәр аша үтеп таҙарыныуға, сафланыуға өлгәшергә тейеш.

Әҫәрҙәрҙә ҡатын-ҡыҙҙың тәрән күңел анатомияһы художестволы һүрәтләнә: героинялары билдәле бер ҡарашҡа тәрән психологик кисерештәр аша килә.

Ә ул асыш артынан әллә ни алыҫ йөрөргә лә кәрәкмәй икән, тик тирә-яғыңа иғтибарлабыраҡ күҙ һалыу ҙа етә. Барыһы ла шунда уҡ асыҡлана. Әгәр “Күңел йорто” повесында Ася-Асия мөхәббәтте, бәхетте оҙайлы эҙләнеүҙәр, ҡайғы-хәсрәттәр аша үткәс кенә (бәлки, билдәле бер инициация үткәс) татый, хикәйәләрҙә иһә героинялар әллә ҡайҙа ымһынып эҙләгән бәхетен эргәһендә генә таба: “Күк умырзая”лағы Айгөл менән Сафура, “Әбейҙәр сыуағы”ндағы Менәүәрә лә, “Беренсе мөхәббәт”тәге Гөлдәр ҙә, “Илаҡ ҡая”лағы Зәлифә лә һ.б.

Г.Ғиззәтуллина — балалар күңеленә һиҙгер әҙибә. Етемдәр йортонан үҙаллы тормош юлына баҫҡан һәм бәхетле булырға ынтылған Асяның да, “Һаумы, әсәй!” хикәйәһендә үҙ ата-әсәһен табырға теләгән Сашаның да хис-тойғолары, ынтылыш-ниәттәре уҡыусыла тәрән психологик кисерештәр тыуҙыра, етем-еһер өсөн борсолдора, уларҙың был аяуһыҙ тормошта үҙ юлын, үҙ өйөн, яҡындарын табыуҙарына ышаныс тыуҙыра. Бормалы-бормалы сюжет коллизияһына ҡоролған был һәм башҡа әҫәрҙәрендә Г.Ғиззәтуллина ысын әҙибә-психолог булараҡ сығыш яһай, уның маңлай күҙе үткер һәм иғтибарлы. Башҡалар күрмәгәнде, ҡәҙимге тип күнеккән хәлде, тормошто ул икенсе төрлө күҙлектән күҙәтә, үҙенсә баһа биреүгә ирешә.

Г.Н.Гәрәева фекеренсә, әҙибәнең “ҡыҫҡа ғына күләмле хикәйәләрендә кешеләр тормошондағы ғибрәтле, фәһемле ваҡиға психологик яҡтан оҫта асып һалына”[3]. Геройҙарының психологик портретын төшөрөүҙә авторға халҡыбыҙҙың бай теле, һутлы һүрәтләү саралары, образлы сағыштырыуҙары, поэтик деталдәре ярҙам итә. Улар оҫта һәм урынлы файҙаланыла, шунлыҡтан әҫәрҙәр художество яғынан бай, мәғәнә йәһәтенән һәлмәк килеп сыҡҡан: “сабырлыҡтың мөлдөрәмә тулған улағына тамған һуңғы тамсы”, “төҫһөҙ генә зәңгәр күҙҙәренән инабат нуры бөркөп тора”, “асыуыңды тотма, күккә осор... рәнйешеңде йыйыу — гонаһ”, “һәр кешегә пәйғәмбәр күҙе менән ҡарау”, “әллә нишләп бәйеле артты ла китте уның... ҡул күтәрә башланы”, “күҙҙән күк китмәне”, “уттың аҡылы буламы?.. Ялҡын — ялҡын инде”, “һөйөү ҡошо осоп китә”, “бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп”, “бер кискә, бер мейескә”, “ғазабы ҡаты — бәхете татлы”, “матур матур түгел — һөйгән матур” һ.б.

“Күңел йорто” повесы — Г.Ғиззәтуллина ижадының билдәле бер кимәлен сағылдырған әҫәр. Унда төп героиня Асяның билдәләп үтелгән күңел анатомияһы төрлө яҡлап һүрәтләнә. Ася үҙен иҫ белгәндән донъяла артыҡ йән итеп тоя, йәшәгәне өсөн үҙен хатта ғәйепле һанай. Ул нисектер өйһөҙ, ышыҡһыҙ, таянысһыҙ: әсәһе уны сабый сағында уҡ вокзалда ташлап киткән, балалар йортонда йәшәгәндә, аҫырауға алынып та, кире ҡайтарылған; үҙ өйөм, донъям тип ылыҡҡан ир өйө уның өсөн тамуҡ менән бәрәбәр булып сыға; инде үҙе ике бала әсәһе булғас, был ерҙә толҡа тапмайынса, үҙ йүнен үҙе күрер өсөн ил гиҙеп сығып китә.

Автор героиняһының яҙмышын бөтә аяныслығында, мәрхәмәтһеҙлегендә асып һала ла, үҙе уйға ҡала кеүек: кеше һәр саҡ шулай бәхетһеҙ, бахыр булып йәшәргә тейешме ни? Ул бит донъяға бәхетле булыр өсөн килә. Ошо фекерҙән сығып, әҙибә Асяның ҡараңғы тормошона сағыу, яҡты буяуҙарҙы,

[3] *Гәрәева Г.Н.* Заман көҙгөһө: геройҙың рухи донъяһы. — Өфө, 2003. — 115-се б.

бәхет тамсыларындай, тамыҙып-тамыҙып ала. Әммә уға бормалы-бормалы юлдар үтергә кәрәк әле. Ҡескәй генә сағында уҡ вокзалдан башланған тормош ғазаптары артабан уны ана шул юлдарға йәнә илтә. Хәҙер килеп шул уҡ вокзалдан бәхет юллап китә. Тимәк, вокзал әҫәрҙә юл йүнәлештәрен, юл сатын символлаштырып торған мөһим бер идея-художестволы деталь функцияһына эйә.

Героиняның күңел йорто ла Башҡортостан ере менән бәйле булып сыға. Ул Ася өсөн иң ғәзиз, ҡәҙерле ергә әйләнә, шунда аяҡ баҫҡандан алып, уның тормошо яңы һулыш һәм йүнәлеш ала. Әммә уға бәхетле булырға, һөйөргә һәм һөйөлә белергә өйрәнергә кәрәк әле, юлында осраған изге күңелле кешеләр — Буранбай, Мәхмүзә инәйҙәрҙең рухи таҙалығын һәм йылылығын, саф, эскерһеҙ теләктәшлек тойғоларын аңлап, зиһене менән ҡабул итә белергә лә тейеш. Ә былар — үҙҙәре үк тиҙ генә хәл ителә торған мәсьәлә түгел. Быға ваҡыт та, рухи көс тә, теләк тә кәрәк. Һәм Ася-Асия бөтә булмышы менән шуға ынтыла, уның хаталар, ҡаршылыҡтар (Вениамин менән үткәргән көндәр), ниәт һәм мөмкинлектәр аша шуға өлгәшәсәгендә шик юҡ. Сөнки, Мәхмүзә инәй әйтмешләй, “Ҡатын-ҡыҙға Хоҙай бөтә донъяны кинәндерерлек наҙ һалған, уртаҡлашыр кешеһе булмаһа, шул наҙ тирә-яҡты ағыулай. Шуның өсөн ҡатын-ҡыҙ яңғыҙ булырға тейеш түгел”. Повеста ошо хәҡиҡәткә билдәле художестволы функция йөкмәтелә һәм, асылда, ул үҙенә күрә төп лейтмотивты ла хасил итә. Асия тағы ла яңылышыуҙан, хаталаныуҙан ҡурҡып, нисек кенә шул наҙҙан ҡасырға теләмәһен, тик ошо хәҡиҡәт кенә уны хәрәкәткә килтерә, артабан юлын дауам итергә этәрә һәм ахырҙа уға өлгәшеүенә лә килтерә.

Әҫәрҙең композицияһы Асяның эске күңел донъяһының эволюцияһын, камиллашыу процесын бермә-бер асыуға ҡоролған. Унда бөгөнгөһөнә үткәндәр асыҡлыҡ индерә килгән төрлө сюжет һыҙыҡтары булдырылған, төрлө кешеләр — ире Сергей менән уның әсәһе, Мәхмүзә инәй, Буранбай, Ғаяз, Фатима, Вениаминдың яҙмыштары төп героиняның тормошо менән бәйле, уның тирәләй хәрәкәт итә. Ошо хәл-ваҡиғалар коллизияһын тағы ла ҡатмарлаштырған художестволы элемент булып мөхәббәт өсмөйөшө тора: Буранбай — Фатима — Ғаяз араһындағы мөхәббәт. Ҡисәге алабарман ауыл егете Буранбай Афған һуғышы аша үтеп, уның барлыҡ фажиғәһенә шаһит булып, үлгән ерҙән терелеп (сүллектә үлем сигендә ятҡан килеш уны бер дәрүиш табып, йәшәү дәртен һеңдерә), ауылына ҡайтҡан ир-егет. Әммә унда уны шәхси тормош ғазаптары көтә — йән дуҫы менән кәләшенең хыянаты. Тик Афған һуғышы кеүек тамуҡ утын кисергән иргә тыныс тормоштоң күңел ҡайғылары, үрһәләнеүҙәре үлемесле хәл түгел. Ул быныһын да әҙәмсә кисерә. Буранбай ҙа, Ася-Асия кеүек үк, бәхеттән өлөшһөҙ ҡалмай.

Шулай итеп, Г.Ғиззәтуллинаның әҫәрҙәре һәр кемде үҙ асылына, “күңел йортона” ҡайтырға, тормош нисек кенә ауыр булмаһын, үҙ булмышына, “мин”легенә хыянат итмәй, тоғро ҡалырға саҡыра. Шуның менән әҙибәнең ижады һәр кемгә яҡын, һәр кем унда үҙ-үҙен, көҙгөгә ҡарағандай, күрер, таныр кеүек. Әҫәрҙәрҙең шундай тормошсан, фәлсәфәле һәм фәһемле булыуында авторҙың художестволы тел оҫталығы һәм поэтик алымдар менән уңышлы һәм урынлы, иркен эш итә белеүе, бай тормош тәжрибәһе, әлбиттә, мөһим роль уйнай.